Донъяла

БӨТӘН ДОНЪЯ ТЫНЫСЛЫҠ ФОРУМЫ. 12-14 апрелдә Дубайҙа үткән Халыҡ-ара тыныслыҡ йыйынында (DIPC) танылған мосолман ғәләмдәре Ислам һәм тыныслыҡ мәсьәләләре буйынса фекер алышты, тип хәбәр итә Gulf News.

Аль-Манар Ҡөрьәнде өйрәнеү Үҙәге тарафынан ойоштороған өс көнлөк сарала бөтөн доньяға билдәле Йософ Истс (Yousuf Estes) (АҠШ), Абдул Рәхим Грин (Abdul Rahim Green) (Бөйөк Британия), Закир Наик (Zakir Naik) (Һиндостан), Хөсәйен Йи (Hussain Yee) (Малайзия) һымаҡ ғәләмдәр ҡатнашты.

Олуғ дин әһелдәре һәм төрлө илдәрҙән килгән юғары дәүләт эшмәкәрҙәре абруйлы йыйында Ислам дине тураһындағы уйҙырмаларға яуап бирҙе һәм был тыныслыҡ диненә ҡағылышлы тәрән, киң мәғлүмәт бирҙе.

Съезд рәйесе М.К.Ибраһим әйтеүенсә, 2010 йылда үткән сарала 150 мең кеше ҡатнашҡайны.

"Тыныслыҡ - Исламдың айырылғыһыҙ өлөшө, съезда быға шәхсән һәм донъя кимәлендә өлгәшеү тураһында һүҙ барҙы. Ғалимдар, Ҡөрьәнде тыныслыҡ идеяларын таратыу күҙлегенән ҡарап, фекер алышты. Төрлө диндәге, төрлө мәҙәниәттәге кешеләр өсөн был сара Исламды яҡшыраҡ аңлау өсөн һәйбәт мөмкинлек тә", - тине Ибраһим.

ИТАЛИЯ. Был илдең Ислам берлеге һәм Ислам ойошмаһы етәксеһе 70 мең тирәһе ерле халыҡтың Ислам динен ҡабул иткәнен белдерә. Заир Изадин әйтеүенсә, әлеге көндә ентекле тикшереү проекты эшләнә. Римда үҙен мосолман тип атаусылар көндөң көнө арта бара. Италияла төп халыҡтың 150 меңе үҙен мосолман тип һанай, ситтән килеүсе мосолмандар бер миллион самаһы. Британиялағы тикшереүҙәр шуны асыҡланы: төп халыҡтың 50 меңе Исламды ҡабул иткән, Германияла - 4500 кеше. Исламды ҡабул итеүселәр төрлө вәкилдәрен тәшкил итә: эшҡыуарҙар, промышленниктар, дәүләт хеҙмәткәрҙәре, профессорҙар, юғары уҡыу йорттары мөғәллимдәре, полицейскийҙар.

ПРАГА. Чехия эске эштәр министрлығының хәүефһеҙлек өлкәһенә ҡағылған квартал отчетында тоткондар араһында Исламды ҡабул итеүселәр арткандан-арта бара. Праганың Рузине төрмәһендә хәҙер 20 кеше үҙен мосолман тип һанай. Рузине төрмәһендәге мосолмандарға намаҙлыҡ, түбәтәй бирелә. Улар биш тапҡыр намаҙ уҡый, айырым ашаталар икән. Чехияның холоҡ тәҙәтеү учреждениелары хеҙмәткәре Рената Балкарова әйтеүенсә, ошондай мөнәсәбәт тоткондарға Исламды һайлауға юл аса. "Улар бик тыныс халыҡ", ти Балкарова чех мосолмандары тураһында.

САРКОЗИ ҮҘЕНЕҢ ЕҢЕЛЕҮЕН ТАНЫНЫ. Николя Саркози Францияның Президенты булып һайлана алмауында мосолмандарҙың тырышлығы аҙ булманы. Н.Саркози хакимлыҡ иткән осорҙо телгә алғанда, Францияла йәшәгән мосолмандарҙың тормошона ҡағылған яңғырауыклы вәкиғаларҙы хәтергә төшөрөргә мөмкин. Президент һайлауҙары алдынан Саркози илдә расизмға һәм ксенофобияға урын юҡ, тип мосолмандарҙың талаптары буйынса һөйләшеү булмаясаҡ, тине.

Шулай ҙа Саркози карьераһында иң яңғырауыҡлы вәҡиғә "Битте һәм тотош кәүҙәне капланған кейемде кейеүҙе тыйыу" тураһындағы законды ҡабул итеү булғандыр. Президент, иммигранттар менән һәр ваҡыт яҡшы мөғәмәлә итеү милли мәнфәғәткә тура килмәй, мосолмандарҙың ҡайһы бер ҡанундарын индерергә тырышыуҙары француздарҙың ҡағиҙәләренә ярашлы түгел, тине. Ләкин тап ошондай лозунгтар яһап, ул хаталанды ла инде. Бөгөн Францияла иң ҙур мосолман диаспораһы йәшәй: биш миллион самаһы, һәм был электорат менән иҫәпләшергә кәрәк ине. Сөнки президент креслоһына ултырыр өсөн ҡай саҡ ниндәйҙер 2-3 процент етмәй ҡала.

Ғилем һәм ғәмәл

МОСОЛМАН ҒАИЛӘҺЕНДӘ БАЛА ҠАРАУ

Нурзидә АҠМАЛОВА

Халыҡ менән тулы автобуста (трамвайҙа, тороллейбуста) өлкәндәргә урын биргән йәштәрҙе күрергә тура килә. Мосолман балаһы йышыраҡ итәғәтле, шуға иғтибар иткәнем бар. Ысынлап та, мосолман тәрбиәһендә оло быуынға хөрмәт күрһәтеүгә баҫым яһала. Ләкин был тәрбиә талап иткәндең ни бары береһе генә. Шулай булғас, нимә һуң ул Ислам тәрбиәһе һәм Рәсәйҙә мосолманға нисек тәрбиә бирергә, тигән һорау тыумай ҡалмай.

Аллаһы Тәғәләнең Китабында мосолмандың социаль тормош ҡағиҙәһе ентекле бәйән ителә: ата-әсәгә хөрмәт итеү, уҡытыусыға, тәрбиәсегә, дөйөм алғанда, өлкәндәргә ихтирам күрһәтеү. Исламдың йәнә лә бер үҙенсәлеге, ул "рухи"ҙы "донъяуи"ҙан айырмай, иманлы булыуың йәшәү рәүешендә сағылырға тейеш. Ә донъяны танып белергә мосолман иң элек үҙенең ғаиләһендә өйрәнә.

Мосолман ғаиләһендә уның ағзалары бер-береһе өсөн яуаплы. Әлбиттә, иң ҙур яуаплылыҡ ирҙең һәм атайҙың иңендә ята. Ул ғаиләне тәьмин итергә, үҙенең ҡул аҫтындағыларҙы (ҡатынын, бала-сағаһын, йыш ҡына ата-әсәһен һәм кесе туғандарын) ҡарарға тейеш. Көнкүреш етешлеге, йорт эсе бөтөнлөгө өсөн әсә яуаплы, сөнки ул үҙенең ғәҙәте, холоҡ-кәнитмеше аша балаларына Ислам әхлағын бирә. Шул уҡ ваҡытта, балаларына ниндәй тәрбиә биргәне өсөн, атай ҙа, әсәй ҙә Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында берҙәй яуаплы. Сөнки Ислам хәкиҡәтенә ярашлы, Киәмәт көнөндә ошо турала Раббылары алдында улар икеһе лә яуап тотасаҡ. Шуның өсөн дә Исламда бала бағыуға бик етди иғтибар бирелә.

Ислам, ата-әсә баланы 21 йәшкә тиклем тәрбиә итергә тейеш, тип ҡарай. Һәм тәрбиә һөҙөмтәле булһын өсөн, был арауыҡты ете йылдан торған өс өлөшкә бүлергә ҡушыла. Ғәрәп халҡында шундай мәҡәл дә бар: бала - ата-әсә алдында буш һауыт, нимә һалаһың, ул шуның менән туласаҡ.

Мосолман булмаған илдәрҙә Ислам тәрбиәһен биреү еңел эш түгел. Эшләп йөрөгән ата-әсә балаһын Ислам балалар баҡсаһына бирә алмай, сөнки Исламға хас социаль инфраструктура бик үҫешмәгән. Бындай шарттарҙа ата-әсә балаһын өйҙә тәрбиәләүгә ҙур урын бүлмәһә, һуңынан ҡатмарлыҡтар килеп сығыуы ихтимал. Ни өсөн тигәндә, ҡәҙемге балалар баҡсаһында күҙгә бик үк эленмәгән, әммә динебеҙгә ҡаршы килгән нәмәләр ҙә булыуы ихтимал. Мәҫәлән, туҡланыуҙы алып ҡарайыҡ. Дөрөҫ, балалар баҡсаһында кескәйҙәргә суҫҡа ите ашатмайбыҙ, тиҙәр. Шулай ҙа хәләл исемлегенә инмәгән башҡа ризыҡтар ҙа етерлек бит. Икенсенән, бәҙрәфкә барған һайын тәһәрәтләнгән мосолманға баҡса тормошонда шәхси гигиенаны үтәүе ауыр. Рәсәй балалар баҡсаларында насрани дине йолаларына ниндәйҙер кимәлдә иғтибар бирелә, әйтәйек, пасхаға йомортҡа буярға өйрәтәләр, Ғайса пәйғәмбәрҙең тыуған көнөнә һүрәт төшөрәләр. Башҡа диндәргә тәрән хөрмәт менән ҡарағанда ла, мосолманға сит йоларағa эйәрергә ҡушылмай. Рухи традицияларға ҡаршы килгән нәмәләр баланың зиһенен бутаясаҡ. Килешеү-һөйләшеү, аңлашыу аша нимә эшләп була, Минең бер таныш ҡатын баҡсаға няня булып эшкә урынлашты ла балаһы мәктәпкә барғансы шунда эшләне. Тағы ла альтернатив мөмкинлек - мини баҡсалар булдырыу. Уларҙы, ғәҙәттә, тәрбиәсе һәм нянялар менән һөйләшеп эшләп була.

Шулай ҙа алда әйткәнебеҙсә, мосолман балаһын өйҙә тәрбиәләү иң ҡулайлыһы. Балағыҙға иман шарттарын үҙегеҙ тәплә итеп аңлата алаһығыҙ икән, был бик яҡшы. Белемегеҙ етешмәһә, ҡайһы бер нәмәләрҙе үҙегеҙ ҙә аңлап бөтмәйһегеҙ икән, мәсеткә, мәсет эргәһендә эшләүсе йәкшәмбе мәктәбенә мөрәжәғәт итә алаһығыҙ. Бындай курстарҙа ғаилә менән дә, йә айырым бәләкәстәр менән дә шөғөлләнәләр.

ӨЙҘӘГЕ МӨНӘСӘБӘТ

Өйҙә балаға (ете йәшкә тиклем) эҙмә-эҙлекле һәм аңлайышлы ябай телдә иман асылын аңлатығыҙ. Был йәштә, әлбиттә, үрнәк кәрәк. Тимәк, ата-әсә үҙҙәре лә Ислам ҡанундарын үтәргә тейеш. Йолаларҙы һаҡлау-үтәү - мосолман ата-әсә өсөн иң яҡшы тәрбиә ысулы. Ә инде ун йәштәрҙә Мөхәммәд пәйғәмбәр әйткәнсә, баланы намаҙға баҫтырырға кәрәк. Мәғлүмәт биреү генә түгел, ә диндең асылына, мәғәнәһенә төшөндөрөү. Был йәштәге баланың ышанысын аҡлау, үҙеңдең абруйыңды юғалтмау. Иманлы юлдан барыу - ҡай саҡ хатта оло кеше өсөн дә еңел бирелмәй. Ә үҙен тормошта эҙләй башлаған үҫмер күңелендә тағы ла күберәк һорауҙар, шик-шөбһә йәшәйәсәк. Ата-әсә бала биргән һорауҙар буйынса мәғлүмәтле булырға тейеш, белмәһәләр, быны әйтергә ҡурҡмаһындар, хәкиҡәтте тәү сығанактарҙан бергәләп эҙлә-геҙ.

Шулай уҡ йәмғиәтебеҙҙә тулы ҡанлы тормош менән йәшәгән камил шәхес тәрбиәләү бик мөһим. Был йәһәттән ҡайһы берҙә мосолман ата-әсәләрҙең фекер айырымлыҡтары ла күренеп ҡала. Берәүҙәр мөхиттең насар йоғонтоһонан ҡурҡып, балаларын айырып-ҡурсып үҫтерергә тырышалар. Икенселәр, бала икенсе кешеләр менән аралашырға, башҡа урындарҙа үҙен нисек тоторға өйрәнмәйәсәк тип, бындай "теплица"ға ҡырҡа каршы. Мосолман балалары - йәмғиәттең айырылғыһыҙ бер өлөшө, уларға үҙ диндәре менән ғорурланырға һәм икенсе дип тоткандарға хөрмәт менән ҡарарға өйрәтергә кәрәк. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд: "Диндә мәжбүр итеү юҡ", тигән.

Үҫмерлек осоро шулай уҡ үҙ ҡатмарлыҡтары менән билдәле. Ғаилә мөнәсәбәттәренә килгәндә, шуны билдәләргә кәрәк, 14 йәшлек баланың мосолман ғаиләһендә үҙ фекерен белдереү хоҡуғы бар. Уның әйткәне хәл иткес булмаһа ла, сөнки барыбер аҙаҡҡы һүҙҙе атай-әсәй әйтәсәк һәм улар фекеренә бала ихтирам менән ҡараясаҡ. Был йәштә бала үҙен кем менәндер сағыштыра, үҙе һымаҡтарҙы табырға тырыша башлай, шундай мәлдә уларға, әлбиттә, үҙҙәренең имандаш дуҫтары бик кәрәк буласаҡ. Ата-әсәнең бурысы ошондай мөхитте булдырыуға ҡайтып ҡала. Нисек итеп? Бик аныҡ юлы бар - йома көндө йәмәғәт намаҙына баланы үҙегеҙ менән алып барығыҙ. Ләкин баланы мәжбүр итмәҫкә, уға бойормаҫҡа. Ул өлкәндәргә ихтирам менән ҡарарға тейеш, ләкин Ислам ҡағиҙәһе буйынса, был бурысты мин-минлектән сығып, яуыз ниәттә файҙаланырға ярамай. Ҡаты ҡуллы булып, тылҡып, үҙеңә һүҙһеҙ буйһоноуҙы талап итеү - һис кенә лә Ислам тәрбиәһенә тура килмәй. Был бик күптән йәшәп килгән шәреҡ традицияһы, уны Ислам тәртибе менән бутамағыҙ, һәм ул йыш ҡына көткән һөҙөмтәне бирмәй ҙә.

Дөрөҫ, Ислам тәрбиәһе, ҡайһы бер сәбәптәргә бәйле, төрлө урында айырым үҙенсәлектәр ҙә алған. Ләкин, һәр ғаиләгә хас булғанса, мосолман ата-әсә үҙ бала-сағаһы менән дуҫ булырға тейеш. Мосолман балаһына тәрбиә биреү буйынса айырым-асыҡ күрһәтмә юҡ, әлбиттә. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд шулай тигән: "Атайҙың үҙ балаһына биргән иң киммәтле нәмәһе - яҡшы тәрбиә". Тимәк, был Ер шарында йәшәгән миллионлаған мосолман халҡының үҙ балаларының ниндәй тәрбиә алыуына яуаплы ҡарай тигәнде аңлата.

Кескәйҙәргә уҡығыҙ

ҠӨРЬӘН ТУРАҺЫНДА БЕЛӘҺЕҢМЕ?

Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА

Заһирҙың күпте белгеһе, күпте аңлағыһы килә. Шуға ла ул әсәһенә һорауҙарҙы яуҙыра ғына. Әсәһе һәр саҡ ваҡыт таба, һорауҙарына яуап бирә. Сөнки ул Заһирҙың аҡыллы булып үҫеүен теләй. Аҡыллы кеше көслө була, ти.

Ҡөрьәнде тотоп ҡарарға иткәс, әсәһе уға иң башта тәһәрәт алырға, йәғни бик тырышып йыуынырға ҡушты. Ни өсөн, тиһегеҙме? Бактиһаң, кешеләргә яҡшылыҡ, изгелек итеүсе таҙа Китапҡа тик таҙа килеш кенә тотонорға кәрәк икән. Бысраҡ кешене Аллаһы Тәғәлә яратмай. Тәһәрәт алып, Китапты тотоп ҡарағас, Заһир шулай тип һораны.

- Аллаһ уны яҙып биргәнме?

Әсәһе уға йылмайҙы.

- Апайың да шулай тип һорағайны. Мин нимә тип яуап бирҙем әле, ҡыҙым? Хәтерләйһеңме?

Рәмзиә апаһы бик тә хәтерле. Ул хатта ҡысҡырып ебәрҙе.

- Беләм! Ҡөрьән - Аллаһтың һүҙе, тип әйттең! Фәрештә аша әйттергән.

- Тап шулай, балаҡайҙарым, - тине әсәләре. - Аллаһы Тәғәлә Үҙенең Һүҙен Ябраил фәрештә аша индергән.

- Мөхәммәд пәйғәмбәргә фәрештә тапшырған, ивет, әсәй! - тине Рәмзиә.

- Эйе, Мөхәммәд пәйғәмбәргә фәрештә еткергән. Ә Мөхәммәд пәйғәмбәр Аллаһы Тәғәләнең һүҙен кешеләргә еткерә барған. Мәғәнәһен аңлатҡан.

- Пәйғәмбәр нимәне аңлата? - тип һораны хәҙер Заһир. Сөнки был һүҙҙе беренсе тапҡыр ишетте ул.

- Аллаһы Тәғәләнең һүҙен кешеләргә еткереүселәрҙе пәйғәмбәр тип атайҙар.

Заһирҙың һорауҙары күбәйҙе генә.

- Әсәй, Мөхәммәд пәйғәмбәр ҡайҙа тыуған?

- Мин беләм! - тип һүҙгә ҡушылды Рәмзиә апаһы. - Мәккә тигән ҡалала.

- Мин Өфө тигән ҡалала тыуҙым, - тине Заһир ғорурлыҡ менән, сөнки ул тыуған ҡалаһын бик ярата. - Ә Мәккә алыҫмы?

- Ул - Сауд Ғәрәбстанында.

Заһир үҙенең Башҡортостанда йәшәүен иҫенә төшөрҙө. Башҡортостан картаһын да яҡшы белә ул.

- Ярай, мин Ғәрәбстанды картанан күрһәтермен, - тине апаһы.

Бына шулай итеп, Заһир мәктәпкә уҡырға төшмәҫ элек үк Мөхәммәд пәйғәмбәр тураһында бик күп нәмәне белде.